Ғилем – көш, аҡыл – ҡанат

Гәзит 2007 йылдың февраленән сыға

№ 1-2 (14-15)
март
2013 й.

# ДАРМАН

«Вестник СФ БашГУ» гәзитенә башҡорт филологияһы факультетының ҡушымтаһы

## “Төркиәттең һәм башҡорт филологияһының хәҙерге проблемалары” (III Биишева уҡыуҙары) Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһында ҡатнашыусыларҙы сәләмләйбеҙ!

Хөрмәтле Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһында ҡатнашыусылар, ҡәҙерле ҡунаҡтар! Бөтәгеҙҙе лә ысын күңелдән тәбрикләргә рөхсәт итегеҙ!



Быйыл республика йәмәғәтселеге Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыуҙы билдәләй. Ул – Ватан әҙәбиәте тарихына мәңгелеккә ингән «Яҡтыға» трилогияһын ижад иткән билдәле һүҙ оҫтаһы. Уның әҫәрҙәре нигеҙендә республиканың, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренең, Советтар Союзында йәшәүсе бик күп быуын кешеләренең граждандыҡ бурысы һәм әхлаҡи позициялары нығынды. Бөгөнгө беҙҙең ҡаҙаныштарыбыҙҙа уның эшмәкәрлегенең һәм ижадының өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Зәйнәб Биишева яҙыусы ғына түгел, ә үҙ халҡының бөтә инештәре башында һүҙ һәм уны сағылдырыусы китаптың тороуын аңлаған мәғрифәтсе. Ул – Республикала нәшриәттең барлыҡҡа килеүенә һәм үҫешенә лә ҙур өлөш индергән шәхестәрҙең береһе.

Зәйнәб Биишева – башҡорт балалар әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы ла. Бөтәһе лә бала саҡтан башлана, тип иҫәпләй ине ул. Кеше ғүмеренең ошо миҙгелендә өлкәндәрҙең бала күңелен үҙенә ылыҡтырыуы бик әһәмиәтле, һәм, әгәр ҙә был тормошҡа ашһа, балаға белем һәм тәрбиә биреү, ә иң мөһиме – үҙ халҡындың күп быуатлы традицияларына йәлеп итә алыу мөмкинлеге лә киңәйә һәм былар бөтәһе лә тел (мифология һәм фольклор), халыҡ ижадының синкретик формалары (йола, музыкаль һәм бейеү сәнғәте) аша башҡарыла. Был күренештәр уҡытыусының психологик һәм педагогик оҫталығының нигеҙҙәрен тәшкил итә һәм Зәйнәб Биишева ла, һис шикһеҙ, шундай оҫта уҡытыусыларҙың береһе һанала.

Бөгөнгө көндә Республикала мәғариф системаһы юғарыла һанап кителгән принциптар нигеҙендә төҙөлә, ул динамик рәүештә үҫешә. Хәҙерге ваҡытта З.Биишеваның трилогияһында һүрәтләнгән осорҙо – яҡтыға талпынған уҡыусыларҙың уҡыу өсөн мәктәбе һәм уҡытыусыһы булмаған кеүек күренештәрҙе – күҙ алдына ла килтереүе мөмкин түгел.

Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы ла бына шундай әһәмиәтле эшмәкәрлек, йәғни яҡтылыҡ таратыу – белем биреү менән шөғөлләнә лә инде.

Беҙҙең уҡытыусылар өсөн сит ил ғалимдары ҡатнашлығында Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһын үткәреү үҙҙәренең профессиональ һәләтлектәрен камиллаштырыу менән шөғөлләнә алырлыҡ фән һәм уҡытыусылыҡ кадрҙарын әҙерләүҙә тағы ла бер ҙур аҙым булып тора.

Хөрмәтле конференцияла ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар! Һеҙгә ижади уңыштар теләйем!

***Й.М. Әбдрәшитов, Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы директоры.***

Ырыҫлы ер – Башҡортостан, Гөлбостан һин.
Бәхет, шатлыҡ, нур төйәге Гөлбостан һин.
***
Күгәреп ятҡан Уралындай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайындай ҡарт, олпат һин,

Күпте күргән сәсәнендәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!
***
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем!

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ ЯҘЫУСЫҺЫ ЗӘЙНӘБ БИИШЕВАНЫҢ ТЫУЫУЫНА 105 ЙЫЛ

## Республикала Халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исемен мәңгеләштереү

Халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәренең береһе З.Биишева исемен мәңгеләштереү буйынса республикала байтаҡ эш башҡарылды. 1997 йылдың 26 августында БР Министрҙар кабинеты ҡабул иткән 167-се һанлы «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З.Биишева исемен мәңгеләштереү тураһында» ҡарарына ярашлы, эш бер нисә йүнәлештә бара. Беренсенән, яҙыусы биографияһы менән бәйле иҫтәлекле урындарҙы билдәләү. Шуға бәйле, башҡалабыҙ Өфөлә яҙыусы йәшәгән йорт – Коммунистик урамы, 71-се йорт адресы буйынса мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Өфөлә һәм Күгәрсен районы Мораҡ ауылындағы тәҙәк һәм матур урамдарға З.Биишева исеме бирелеүе, 3-сө һанлы Мораҡ гимназияһының З.Биишева исемен алыуы – ошо ҡарар нигеҙендә башҡарылған һәйбәт ваҡиғалар. Күгәрсен районы хакимиәте, Башҡортостандың Яҙыусылар берлеге йыл да тапшырыла килгән З.Биишева премияһын ойоштороусы булып сығыш яһаны. Үрҙә телгә алынған ҡарарҙа яҙыусының тыуған ауылы Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында З.Биишева исемендәге мәктәп-музей асыу, шулай уҡ Күгәрсен районы Мораҡ ауылында яҙыусыға бюст ҡуйыу, Өфөлә уның фатирында музей асыу кеүек эш йүнәлештәре лә билдәләнгән. Туйөмбәт ауылындағы мәктәп-музей, билдәле булыуынса, 1998 йылда, киң йәмәғәтселек ҡатнашлығында тантаналы шарттарҙа асылды. Ул үҙенең үҙенсәлекле архитектураһы, эске биҙәлеше буйынса республикабыҙҙы йәмләп тора. «Китап» нәшриәтенә З.Биишева исеменең бирелеүе - шулай уҡ яҙыусы ижадына оло хөрмәт билдәһе булды. Һуңғы йылдарҙа республикала З.Биишева исемен йөрөткән мәктәптәр, урамдарҙың арта барыуы уның ижадына ҡыҙыҡһыныуҙың һүрелмәүе хаҡында һөйләй, яҙыусы исемен мәңгеләштереүгә булышлыҡ итә.

З.Биишева ижадының тарихи һәм мәҙәни әһәмиәтен аңлау-аңлатыу, уны пропагандалау йәһәтенән башҡарылған башҡа эштәр ҙә иғтибар үҙәгендә. Төп бурысыбыҙ – яҙыусының әйтер һүҙен, уның бөтмәҫ-төкәнмәҫ күңел хазиналарын, йәғни китаптарын халыҡҡа алып барып еткереү. Әлбиттә, З.Биишева әҫәрҙәренең тулы йыйынтығын сығарыу, уның шәхси һәм ижади биографияһындағы факттарҙы туплап бер тәртипкә һалыу, әҙәби мираҫын барлау, яҙыусы тураһында ҡәләмдәштәренең хәтирәләрен, альбомын нәшер итеү – һуңғы йылдарҙа республикала ошо йәһәттән башҡарылған эштәр һәр яҡтан хуплауға лайыҡ.

2008 йылда әҙибәнең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы йәмәғәтселек киң билдәләп үтте. Был тантаналар халыҡ тарафынан ихлас һәм эскерһеҙ ойошторолған күркәм тамашаларға әйләнде.

Республика тарихында З.Биишева исемен мәңгеләштереүгә бәйле йәнә бер яҡты бит – 2008 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының Зәйнәб Биишева исемен алыуы. Уға арҙаҡлы шәхесебеҙ Зәйнәб апай Биишева исемен биреү юғары тәрбиәүи маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙың емешле юлдарының береһе булды. 2008 йылда СДПА-ла халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева музейы ла ойошторолдо. Ул заманса биҙәлеше, фотоларҙың, экспонаттарҙың яҙыусы ижадын тәрән аңлап, яратып урынлаштырылыуы, материалдарға ярайһы уҡ бай булыуы яғынан өлгө булырлыҡ. Беҙҙең уҡыу йортона яуаплы бурыс – музейҙы ойоштороу эштәре йөкмәтелде. Музейҙы ойоштороусы башҡорт әҙәбиәте кафедраһы уны З.Биишева ижадына бәйле ғилми, методик йүнәлештәге үҙенсәлекле үҙәк буларак формалаштырған. Уҡыу йортонда урынлашҡан музей буларак, төп иғтибар яҙыусы ижадын өйрәнеүселәрҙең хеҙмәттәренә күпләп бүленгән. Улар бөртөкләп йыйылған һәм йыйыла килә, махсус стендта яҙыусы хаҡында ғилми хеҙмәттәр, уларҙың авторҙары хаҡында мәғлүмәттәр (З.Биишева ижадына ҡарата төүге рецензияларҙан башлап) урын алған.

З.Биишева музейына мәктәп уҡыусыларының, студенттарҙың эҙе һыуынмай. Музей ҡалабыҙҙың үҙенсәлекле мәҙәни-әҙәби үҙәге ролен уңышлы башҡара.

Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында (хәҙер БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы) Халыҡ-ара Биишева уҡыуҙары үткәрелеүе күркәм традицияға әйләнде. Республика йәмәғәтселеге Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыуҙы киң билдәләгән был көндәрҙә Стәрлетамаҡ ерендә III Биишева уҡыуҙары үтә. Был сарала республикабыҙҙан, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән ғалимдар ҡатнаша. Фекер алышыуҙарҙа төп тема — З.Биишева ижады.

***Р.Х. Илешева,***
*филология фәндәре кандидаты, доцент*
*БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары*

Ауыр юлды бергә-бергә үттек,
Еңеүгә лә килдек күмәкләп.
Һәр аҙымда тойҙом йәнәшәмдән
Дуҫтар атлағанын терәкләп.

Ә шулай ҙа, дуҫтар, ысын дуҫтар,
Мин һеҙҙе бит бик-бик яраттым

***

Кешегә хас ғорур, ҡыйыу,
Саф булды минең йөрәк.

# Зәйнәб Биишева – һүҙ оҫтаһы

Зәйнәб Биишева әҫәрҙәренең темаһы – лирик герой-замандаштың тойғолары һәм кәйефе: дуҫлыҡ, мөхәббәт, тоғролоҡ, намыҫ, ауыр ваҡыттарҙа – күңел төшөнкөлөгө, күңел ҡайтыулығы. Әҫәрҙәренең күбеһендә яҙыусы тыуған ер, Ватан, кеше, уның хеҙмәте, бәхете хаҡында уйлана. З. Биишева шиғырҙарының лирик геройы бәхетте мөхәббәттә, дуҫлыкта, хеҙмәттә табыусы шағирәнең үҙенә тартым. Яҙыусы үҙенең туған телен яратыуын, уға булған сикһеҙ хөрмәтен «Башҡорт теле» шиғырында бөтә тулылығында күрһәтә. Шиғырҙа башҡорт теленә ҡарата ҡулланылған моңло, нәфис, наҙлы, хөрмәтле, бай эпитеттары менән бергә илһамлы, ҡәҙерле, олпат, ҡарт, йор, зирәк, мәрхәмәтле эпитеттары ла контекста ҡолаҡҡа ятышлы һәм матур яңғырай.

З. Биишева әҫәрҙәрендә ыңғай һәм кире эмоциялар тыуҙырыусы эпитеттар йыйылмаһы иғтибарға лайыҡ: нәфис, наҙлы, илһамлы, һөйөклө, ҡәҙерле, гүзәл, мәрхәмәтле, бәхетле, үкһеҙ етем, тома һуҡыр, ҡырыҫ, йәнһеҙ, тупаҫ, әсе, йәмһеҙ, меҫкен, мыҫҡыллы, шаҡшы һ.б. Шулай уҡ З. Биишева әҫәрҙәренең төҫ гаммаһы «күреү», «ишетеү», «тойомлау» эпитеттары аша бирелгән: тоноҡ аҡһыл, аҡ, ҡара, ҡараһыу, алһыу, зәңгәрһыу, алтын, көмөш, көңгөрт, һорғолт, күгелйем, ҡыҙғылт, саф, йомшаҡ, тымыҡ, шаҙра, ҡуйы, серле, хуш еҫле һ.б. Мәҫәлән: «Айҙан түгелгән көмөш нурҙарға ҡойоноп, ҡала серле, тын ята» («Дуҫ булайыҡ»).

Традицион һәм яңы алымдарҙы ҡулланыу менән бергә, З. Биишева үҙенең образдар системаһын да булдыра. Уның әҫәрҙәрендә беҙ үҙенсәлекле, эстетик мәғәнәле образдарҙы осратабыҙ. Мәҫәлән, «Дуҫ булайыҡ» повесының «Ауылда тәүге кис» тип аталған беренсе бүлегендә төп герой Юлдаш ауылдаштары менән таныша. Яҙыусы һәр бер персонажға ҡыҫҡаса характеристика биреп китә. Мәҫәлән, ҡарт көрәшсе Хәсән бабайға ҡарата автор «баһадир» һәм «әзмәүерҙәй» тигән эпитеттар ҡуллана. Шуның менән бергә данлы көрәшсе Хәсәнгә боронғо ҡаһармандар кеүек өҫтәй. Ә Хәсән бабай көс һынашҡан батыр егеттең көс-ҡеүәтен күрһәтеү өсөн «көслө шайтан» тигән эпитет яһай: «Кәүҙәгә ҙур ҙа түгел, ә көслө ине, шайтан, ергә йәбешеп үҫкәнме ни. Күтәреп алып булмай» («Дуҫ булайыҡ»).

Авторҙың индивидуаль эпитеттары ла иғтибарға лайыҡ. Мәҫәлән, халыҡта «эштең төбөнә төшә», «эштең башы», «эштең асылы» тип һөйләү бар. З. Биишева иһә «Дуҫ булайыҡ» повесында быны «эштең әлифбаһы» тип атай: «Миңә бераулаусы булып та күп кенә йылдар эшләргә тура килде. Йыйып әйткәндә, быйндағы эштең әлифбаһынан төштөм мин».

Был – тасуири һөйләмдә әҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыуҙың матур, классик өлгөһө. Быйндай өлгөләрҙе әҫәрҙә күп осратырға мөмкин: күңел һалмай, ярат-май, тырышмай, ярты-йорто башҡарылған эш; күҙ ҡойроғонда ғына сағылып ҡалған йылмайыу, айырата көслө, ярһыу моң менән тулы тауыш; берсә әкрен, берсә уйсан, берсә дәртле тулҡын тауыш; ҡыуаныстан сурлап аҡҡан күҙ йәштәре; үлтерерлек әсе мыҫҡыллы, һынаулы ҡараш һ.б.



Әйберҙе сифатлау өсөн эпитет табыу еңел түгел, әлбиттә. Бер үк төрлө эпитетты ҡабат ҡулланыу һөйләмде биҙәмәй. Шуға күрә һүҙ оҫталары сифаттарҙың күп мәғәнәлелегенә иғтибар итергә тырышалар. Һөйләмдә эпитеттың эске мәғәнәһе күтәлмәгән яғы менән асылып китә.

Кешенең күҙ ҡарашын, эске торошон һүрәтләүҙә автор тарафынан ҡулланылған эпитеттарҙың матур өлгөләрен күрәбеҙ. Быйна улар: «ҡараш» – ғәжәп аҡыллы, уйсан, ғорур, һораулы, асыулы, йыуаш, һынаусан, ҡыйыу, яҡты, осҡонло, һоҡланыулы, борсоулы, ентекле, эре, сәйер; «күҙ» – ҙур, түңәрәк, моңһоу, ҡайғылы, мөлдөрәмә, йәнле, көләс, уяу, көнсөл, теремек, аҡыллы, шаян, күгелйем; «тауыш» – үкенесле, көслө, иркә, моңло, әсе, саф, йәш, ҡалын, яғымлы, һалмаҡ, хужаларса, көр, бойороулы, тантаналы, баҫалҡы, ярһыулы, сағыу, ҡырыҫ, йәмһеҙ. Мәҫәлән: Быйна бер саҡ быйғаса бер ҡасан да ишетелмәгән шундай саф, йәш, көслө, беҙҙә һирәк була торған ҡалын тауыш яңғырап китте.

Хәҙерге әҙәби әҫәрҙәр телен тикшергәндә беҙ яңғыҙ йәки тиң киҫәк формаһындағы, шулай уҡ тарҡау эпитеттарға иғтибар итәбеҙ. Быйның өлгөләре З. Биишева әҫәрҙәрендә лә бар:

1. Яңғыҙ эпитеттар: ҡоро һорау, ҡаты һорау, еңел һорау, ҡырағай ҡыуаныс, тәрән белем, тәрән сер, тәрән хөрмәт.

2. Тиң киҫәк формаһындағы эпитеттар: татлы, ләззәтле ҡыуаныс, көслө, яңғырауыҡлы тауыш.

3. Тарҡау эпитеттар: сикһеҙ яғымлы ғәҙәт, маһайыусан эре малай.

Тарҡау һәм тиң эпитеттар предметты төрлө үҙенсәлеге, характерлы билдәһе, сифаты буйынса асыҡларға ярҙам итә.

Шулай итеп, З. Биишева әҫәрҙәрендә эпитеттар бик оҫта ҡулланылып, үҙҙәренең эске мәғәнәһе, образлылыҡ нигеҙе, эстетик функцияһы йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә.

***Г. Байбулатова,***
*филология фәндәре кандидаты,*
*БДУ-ның Нефтекама филиалы доценты.*

# Халҡым тип йәшәне...

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып шиғыр китаптарын сығарған, беренсе булып драма әҫәрҙәре яҙған, киң ҡоласлы, тәрән йөкмәткеле романдарҙан торған беренсе башҡорт трилогияһын ижад иткән ҙур һүҙ оҫтаһы Зәйнәб Биишева – символик мәғәнәгә эйә шәхес. Уның бөтә ғүмере, ижади эшмәкәрлеге — Тыуған илгә, халыҡҡа арымай-талмай хеҙмәт итеүҙең юғары өлгөһө ул. Зәйнәб Биишева үҙенең автобиографик яҙмаларында былай тигәйне: «Ил өсөн, халыҡ өсөн намыҫлы хеҙмәт – минең иң ҙур бәхетем булды». Һәр кем дә шулай тип әйтә аламы икән? Бөгөнгө көндә — Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең киләсәге өсөн ныҡышмалы эҙләнеүҙәр һәм аныҡ эштәргә күсеү юлында — яҙыусы һүҙенең әһәмиәте арткандан-арта бара.

Зәйнәб Биишева һәр ваҡыт белемгә, камиллыҡҡа ынтылған. Шуға ла уның ижадында намыҫ, яуаплылыҡ, әҙәп һәм башҡа әхлаҡ принциптарының төп урынды алыуы һис тә ғәжәп түгел. Заман һулышы менән һуғарылған шиғырҙары, халыҡ тарафынан яратып уҡылған «Мөхәббәт һәм нәфрәт», «Уйҙар, уйҙар…», «Сәйер кеше» кеүек әҫәрҙәре, халыҡ яҙмышын һәм тарихын тәрән яҡтыртҡан «Яҡтыға» трилогияһы бөгөнгө көндәргә тиклем йәш кешенең рухи формалашыуы өсөн иң ҡиммәтле сығанаҡ булып хеҙмәт итә.

Бик күп замандаштары кеүек үк, дан йырлауҙарҙан, мәдхиәләрҙән Зәйнәб Биишева ла азат булманы. Ләкин әҙибәнең ижад юғарылығы, оптимистик рухы, тәрән патриотизмы, үҙенә генә хас образлылығы менән күңелдәрҙе бөгөн дә арбай. Уның лирик геройы илем, халҡым, телем тип йәшәүсе, ҙур тойғоларға һәләтле булған саф йөрәкле кеше булып күҙ алдына баҫа.

Зәйнәб Биишева – нескә хис-тойғоло лирик та. Бына «Миләш» шиғырын ғына алайыҡ. З.Биишеваның миләше — тәрән психологик кисерештәрҙе, эске ғазаптарҙы, һыҙланыуҙарҙы белдереүсе образ да, кеше тормошондағы драматик мәлдәрҙе һынландырыусы символ да. Миҙгелдәр алмашынған һайын, ул япраҡ та ярыр, сәскә лә атыр, ҡыҙарып тәлгәшләнер ҙә, тик лирик героиняның ҡәҙерле кешеһе генә кире ҡайтмаҫ шул. Бына ошоно күңеленә, аңына һыйҙыра алмай өҙгөләнә ул…

**Аңламайым һис-һис:**
**Тәлгәшләнә нисек,**
**Тәлгәшләнә нисек,**
**Һин киткәс?!**

Әҙибә һәр ваҡыт жанр төрлөлөгөнә, яңы буяуҙарға ынтылды. Уның ижадында ода, йыр, бағышлау, парса, мәдхиә, мәҫәл кеүек жанрҙар менән бер рәттән, формалар синтезына ҡоролған поэма-монолог, әкиәт-мәҫәл, шиғри повесть, драматик поэма кеүек ҡатмарлы жанр төрҙәре лә урын алды.

Ғөмүмән, З.Биишеваның поэтик донъяһы башҡорт әҙәбиәтендә үҙенең ҡабатланмаҫ эҙен, яҡты буяуҙарын ҡалдырҙы. Ул үҙ заманына тоғро булып йәшәне, яҡтылыҡ, изгелек, намыҫлылыҡ һыҙаттарын данланы, бөтә йөрәге менән илен, тыуған телен һөйҙө һәм әҫәрҙәре менән халыҡҡа хеҙмәт итте.

***Л.Р. Кирәева,***
*филология фәндәре кандидаты, доцент.*

# Әҙибәнең тылсымлы сихри көсө

Стәрлебаш – борон-борондан мәҙәниәт һәм мәғрифәт үҙәге булған. Беҙ, Баһауетдиновтар ғаиләһе, ул ваҡытта Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын сак тамамлап ҡайтҡан ике йәш белгес, дәртләнеп, ең һыҙғанып балаларға аң-белем биреү эшенә тотоноп киттек. Башта Ҡалҡаш урта мәктәбендә, Стәрлебашҡа күскәс, унда алды-ялды белмәй, мөкиббән китеп, йөҙөп йөрөп эшләнек. Мин – мәктәптә директорҙың уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары, аҙаҡ директор, иптәшем – Баһауетдинов Нурфәиз Муса улы – район мәғариф бүлеге етәксеһе, партия комитеты секретары, район Советы секретары булып эшләгәс, һәр ваҡыт уҡыусылар, ата-әсәләр, халыҡ менән бергә булырға, берҙәм эшләргә тырыштыҡ. Мәктәптә генә түгел, ауылда, аҙаҡ район күләмендә төрлө саралар үткәрелде. Шундай осрашыуҙарҙың береһе — мәшһүр әҙибә Зәйнәб Биишева менән ойошторолдо. “Йәшәү бәхете —илең, халҡың өсөн ижад аша тыуған шатлыкта ” тип аталды ул кисә. Ауыл мәктәптәрендә, клубтарҙа, китапханаларҙа, йомғалау кисәһе Стәрлебаш район мәҙәниәт йортонда үткәрелде. Ҡайҙа ғына булһа ла, халыҡ эркелеп килде, әҙибәнең үҙен күреп – һөйләшеп ҡалырға теләүселәр, һоҡланыуын, рәхмәт һүҙҙәрен әйтергә теләүселәр кластарға, клубтарға, ҙур мәҙәниәт йортона ла һыйманы. Ысын мәғәнәһендә район байрамына әүерелде. Зәйнәб Биишева ла ихлас йөрәнә, Стәрлебаш халҡының үҙен шулай хөрмәтләүенә бик ҡәнәғәт, рәхмәтле булды. Бер аҙна инәйем менән бергә йәшәгән арала (әйткәндәй, икеһе лә бер йылда, бер көндә тыуған) улар шул тиклем дуҫлашып киттеләр, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй торғайны. Ауыл халҡы ябай бит, көн дә уны ҡунаҡҡа саҡыра башланылар, уй-тойғоларын табын артында, тәбиғи шарттарҙа еткерә белделәр. Шул түгелме ни халыҡтың Халыҡ яҙыусыһына булған һөйөүе! Әҫәрҙәрен уҡығандар менән ихлас аралашыуы, фекер алышыуы, кешеләрҙең эске донъяһын, күңелен аңлауы – иҫ киткес бер күренеш була торғайны.



Әҙибәнең тылсымлы сихри көсө – башҡорт халҡының үҙенсәлектәрен, холҡон, йәшәйешен, ғөрөф – ғәҙәттәрен белеп, үҙ йөрәге аша үткәреп, әҫәрҙәрендә тасуирлай белеүендә булғандыр. Рухи усаҡ тоҡандыра белә ине шул Зәйнәб апай Биишева. Ишетеп түгел, үҙем кисереп беләм.

Бер хәтирә. 1986 йылда Зәйнәб Биишева менән "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында бер ай ял иттек. Күпме кистәр, көндәр иҫтәлекле мәл генә булып ҡалды. Бергә саф һауала йөрөү, көн дә шиғриәт минуттары үткәреү, яҡшылыҡ менән яманлыҡтың көрәше, йәшәү мәғәнәһе, ижади хеҙмәт шатлығы, кешенең күңел сафлығы тураһын-да әңгәмәләр минең зиһенемде байытты, йәшәйешемде тулыландырҙы. Ижади хеҙмәт кенә илһам бирә, кешене яңы әҙләнеүҙәргә, асыштарға дәртләндерә, шатландыра һәм рухландыра икәнен шунда төшөндөм. Артабан даими хат алышып торҙоҡ, оло әҙибәбеҙ беҙҙе һәр байрам менән ҡотлай ине...

Күпме йылдар үтһә лә, оло хөрмәт, айырыуса бер йылылыҡ менән Зәйнәб апайҙы иҫкә алабыҙ. Тылсымлы сихри көскә эйә илаһи зат булған ул! Шәхестәрҙең бөйөклөгө уларҙың ябайлығында, ихласлығында, ҡылған эштәренең тәбиғилегендә шул.

*Башҡортостандың Халыҡ уҡытыусыһы, Рәсәй мәктәптәренең Почетлы хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Зәйнәб Биишева премияһы лауреаты, филология фәндәре кандидаты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының 1976 йылғы сығарылыш студенты*

***Баһауетдинова (Хәлилова) Миңлехәнә Ишмөхәмәт ҡыҙы.***

# Биишева Зәйнәб Абдулла ҡыҙының тормошондағы һәм ижадындағы мөһим ваҡиғалар

**1908 йылдың 2 ғинуарында** Башҡортостандың Күгәрсен районы Түйөмбәт ауылында тыуған

**1924-1929 йй.** Ырымбур башҡорт педагогия техникумында уҡый

**1929-1931 йй.** Баймаҡ районы Темәс ауылында уҡытыусы булып эшләй

**1931-1934 йй.** Башҡортостан китап нәшриәтенең һәм «Пионер» журналының мөхәррире

**1934-1938 йй.** Мәсетле һәм Салауат районддарында гәзит редакцияһында эшләй

**1938-1941 йй.** Башрадиокомитетта эшләй, КПСС ағзаһына алына

**1942 й.** «Партизан малай» исемле беренсе китабы донъя күрә

**1942-1944 йй.** «Ҡыҙыл Башҡортостан» өлкә гәзитендә эшләй

**1944-1947 йй.** «Йәнле хәрефтәр» исемле шиғри әлифба сығара

**1946 йылдан** – СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы

**1947-1951 йй.** Башгосиздатта балалар әҙәбиәте секторы етәксеһе

**1960 й.** «Почет билдәһе» ордены менән бүләкләнә

**1968 й.** «Кәмһетелгәндәр» һәм «Уяныу (Оло Эйек буйында)» романдары донъя күрә. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ була

**1968 й.** Икенсе тапҡыр «Почет билдәһе» ордены менән бүләкләнә

**1974 й.** «Яҡтыға» трилогияһының 3-сө бүлеге –«Емеш» романы донъя күрә

**1976 й.** Өсөнсө тапҡыр «Почет билдәһе» ордены менән бүләкләнә

**1990 й.** «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» исеменә лайыҡ була

**1996 йылдың 24 авгусында** Өфө ҡалаһында вафат була

**60-лап китабы** Рәсәйҙең һәм донъяның төрлө телдәрендә нәшер ителә.

## Наградалары

**1960 й.** «Почет билдәһе» ордены

**1968 йылда** «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында» романдары өсөн Салауат Юлаев исемендәге премия

**1968 йылда** әҙәбиәт өлкәһендә күренекле хеҙмәттәре һәм ижтимағи эшмәкәрлеге өсөн икенсе тапҡыр «Почет Билдәһе» ордены, БАССР Юғары Советы Почет Грамотаһы

**1976 йылда** өсөнсө тапҡыр «Почет Билдәһе» ордены

**1990 йылда** «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы»

# Иҫтә ҡалырлыҡ осор

*(башҡорт филологияһы факультеты студенттары менән әңгәмә)*

Уҡыу йортоноң ҡайнап торған тормошон уҡытыусыларҙың эшмәкәрлегенән һәм, әлбиттә, студенттарҙан тыш күҙ алдына ла килтереп булмай. Йәшлек дәрте ташып торған, яҡты уй-хыялдар менән йәшәгән, тәбиғәт биргән һәләттәрен асырға ынтылған студенттарҙы әңгәмәгә саҡырҙыҡ: улар — Башҡортостан Президенты стипендиаты — Фидалия Хәсәнова (5 курс), яҡшы уҡыу менән бергә барлыҡ йәмәғәт сараларында әүҙем ҡатнашыусы егеттәр — Илшат Сынбулатов (5 курс) һәм Тимур Усманов (4 курс).

*– Тап ошо уҡыу йортон һәм башҡорт филологияһы факультетын һайлауығыҙҙың сәбәбе?*

**Фидалия Хәсәнова:**

– Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә һөйөү килтерҙе факультетҡа. Шулай уҡ Ишембай ҡалаһының 3-сө мәктәбендә эшләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Иҙрисова Гүзәл Урал ҡыҙының йоғонтоһо ҙур булды.

**Илшат Сынбулатов:**

– Мине айырыуса башҡорт телен тәрәнерәк өйрәнеү менән бергә инглиз телен өйрәнеү мөмкинлеге ҡыҙыҡтырҙы.

**Тимур Усманов:**

– Шулай уҡ сит телдәргә булған ҡыҙыҡһыныу килтерҙе факультетҡа. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ төрөк теле менән ҡыҙыҡһына башлағайным...

*– Уҡыу барышында иң иҫтә ҡалған ваҡиғалар булдымы?*

**Илшат Сынбулатов:**

– 2009 йылда академиянан 10 кешене студенттар менән алмашыу программаһы буйынса Төркиәгә, Анкара ҡалаһының Гази университетына ебәргәйнеләр. Бер ай буйы беҙ төрөк телен өйрәндек. Дәрестәрҙән һуң төрлө экскурсияларға йөрөнөк. Айырыуса унда ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының Башҡортостан вәкиле, тарих фәндәре кандидаты Әхәт Сәлиховтың ярҙамы ҙур булды. Минеңсә, ошондай программалар студенттар өсөн ҙур мөмкинлектәр аса.

**Фидалия Хәсәнова:**

– “Мәрхәмәтлектең юҡтыр сиктәре” кеүек акцияларҙа ҡатнашыу, Бөрйән районы Шүлгәнташ мәмерйәһенә экскурсия, Шишмә районы “Восход”, Мәләүеҙ районында “Спутник”, “Сапсан” ял базаларында каникулдарҙы үткәреү... Шулай ҙа иң бәхетле осор – Краснодар крайы Сочи ҡалаһында ял иткән ваҡыттыр. Яҡшы уҡыған, иң әүҙем студенттарҙы уҡыу йорто шулай ҙурлағайны.

**Тимур Усманов:**

– Иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар бик күп булды. Уҡыу барышында миңә студенттарҙы алмашыу программаһы буйынса ике тапҡыр Төркиәлә белемде камиллаштырыу бәхете эләкте. Унда бик күп яңы дуҫтар таптым, төрөк телендә иркен аралашырға өйрәндем.

Быйыл Таулы Алтайҙа уҙғарылған төрки телдәре һәм әҙәбиәттәре буйынса Бөтә Рәсәй студенттар олимпиадаһында ҡатнаштым. Был сәйәхәт бар яҡтан да файҙалы булды: беҙ унда билдәле шәхестәр, ғалимдар менән осраштыҡ, башҡа төрки халыҡтарҙың йәшәйеше, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыҡ. Хәҙер минең Таулы Алтайҙа, Якутияла, Тывала дуҫтарым бар.

*– Факультетта уҡыу процесы тураһында нимәләр әйтерһегеҙ?*

**Илшат Сынбулатов:**

– Гилем алыу өсөн бында бөтөн юлдар асыҡ: төрлө мультимедиа интернет-лабораториялар, электронлы уҡыу залдары, ҙур китапхана...

**Тимур Усманов:**

– Төрлө яҡлап һәләттәреңде асыу өсөн шарттар булдырылған: фестивалдәр, конкурстар, түңәрәктәр, конференциялар.

**Фидалия Хәсәнова:**

– Беҙҙе белемле, кешелекле, һәйбәт уҡытыусылар уҡыта. Фәнни үҫеш өсөн ҙур мөмкинселектәр бар. Мәҫәлән, минең Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Ижевскиҙа, Тобольскиҙа уҙғарылған конференцияларҙа ҡатнашҡаным бар.

*– Буш ваҡытығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ?*

**Илшат Сынбулатов:**

– Буш ваҡыт юҡ тиерлек. I курстан алып драма студияһында (етәксеһе — А.Хәлилов) шөғөлләнәм. “СТРАЙК” ШТК командаһы (етәксеһе — Г.Вәлиева) составында төрлө сараларҙа ҡатнашам. Ғөмүмән, беҙҙә студенттарҙың талант-тарын асыр өсөн бик күп түңәрәктәр һәм саралар бар: ҡурай түңәрәге, “Дәрүиш” халыҡ бейеүҙәре ансамбле, “Йөрәктау” фольклор ансамбле...

**Тимур Усманов:**

– Буш ваҡытымда шиғырҙар һәм йырҙар ижад итәм. “Ашҡаҙар” ижад түңәрәгенә, драма студияһына йөрөйөм. Төрлө сараларҙа ҡатнашырға тырышам. Мәҫәлән, быйыл гитарала уйнап йырлаусыларҙың “Ҡош юлы” I асыҡ фестивалендә ҡатнашып, “Рок стиленә тоғролоҡ өсөн” номинацияһын алдым.

**Фидалия Хәсәнова:**

– Һәр сезон һайын “СТРАЙК” командаһы менән призлы урындар алабыҙ. 3 курста уҡығанда Стәрлетамаҡта үткән “Һылыуҡай” конкурсында 1-се урын, Баймаҡ районында “Башҡорт йәштәре көндәре” сиктәрендә үткән “Һылыуҡай”ҙа Гран-при яулағайным.

*– Яҡшы уҡыу менән бергә әүҙем йәмәғәтселек тормошон алып барыуҙың сере нимәлә?*

**Илшат Сынбулатов:**

– Тырышлыҡта.

**Тимур Усманов:**

– Ваҡытты дөрөҫ бүлеүҙә.

*– Киләсәккә ниндәй пландар менән йәшәйһегеҙ?*

**Илшат Сынбулатов:**

– Уҡыуҙы уңышлы тамамларға һәм был тормошта юғалып ҡалмайынса, үҙ юлымды табырға теләйем.

**Тимур Усманов:**

– Уҡыуҙы тамамлағас, мин үҙемде киләсәктә телерепортер, йә журналист итеп күрергә теләр инем.

**Фидалия Хәсәнова:**

– Әгәр мөмкинлек булһа, уҡыуымды аспирантурала дауам итер инем.

*– Байрам уңайы менән уҡытыусыларға һәм студенттарға теләктәрегеҙ.*

**Илшат Сынбулатов:**

– Барыһына ла һаулыҡ теләйем.

**Тимур Усманов:**

– Уҡытыусыларыма ҡыйын эштәрендә түҙемлек, уңыштар теләйем. Ә студенттарҙы күңелле мәлдәрҙең ҡәҙерен белергә, уҡыу осорон иҫтә ҡалырлыҡ итеп үткәрергә саҡырам.

**Фидалия Хәсәнова:**

- Факультетҡа уҡырға килеүселәр тағы ла күберәк булһын. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йәшәһен ине.

***Л.Кирәева*** *әҙерләне*

## ФАКУЛЬТЕТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

Башҡорт филологияһы факультетының деканы **Зөһрә Иҙрис ҡыҙы Сәләхова** "Башҡорт телендә ҡылымдың йүнәлеш категорияһы" темаһына докторлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡланы. Ысын күңелдән уны ҡотлайбыҙ, ижади уңыштар теләйбеҙ.

**20 февралдә** Мәжит Ғафури ис. Башҡорт дәүләт академия драма театрында шағир, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының 1989 йылғы сығарылыш студенты **Азамат Юлдашбаевтың** һәм шағирә, шулай уҡ беҙҙең вузды 2002 йылда тамамлаған, әлеге ваҡытта башҡорт әҙәбиәте кафедраһы мөдире вазифаһын башҡарған **Рита Фәткуллинаның** «Донъяны йылытҡан усаҡта һинең дә, минең дә осҡон бар» исемле шиғриәт кисәһе үтте.

"Башҡортостан юлдаш телевидениеһы" үткәргән «Көндәлек» тапшырыуында башҡорт теле кафедраһы мөдире **Ләйлә Хөсәйенова** Стәрлетамаҡ ҡалаһы буйынса яҙма эштә еңеп сыҡты!

**21 февралдә**, Халыҡ-ара туған тел көнөндә, Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә донъя күргән "Башҡорт теле" дәреслегенең (яуаплы мөхәррире – проф. К.Ғ. Ишбаев) исем туйы үтте. Башҡорт филологияһы факультетында белем алыусы студенттарға тәғәйенләнгән был дәреслектең авторҙарының күбеһе БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы уҡытыусылары булыуы беҙҙә ғорурлыҡ хистәре уята.

Февраль айында башҡорт теле буйынса зональ Интернет-олимпиада үткәрелде. Унда Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалаларының 34 мәктәбенән 255 уҡыусы ҡатнашты. Еңеүселәр II тур һөҙөмтәһендә билдәләнде, улар I, II һәм III дәрәжә дипломы, призерҙар әҙерләгән уҡытыусылар директораттың рәхмәт хаты менән бүләкләнде.

**26 февралдә** "Башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ мәктәптә һәм вузда уҡытыуҙың көнүҙәк проблемалары" темаһына түңәрәк өҫтәл уҙғарылды. Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай ҡалаларының тәжрибәле башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, башҡорт теле кафедраһы ғалимдары эшлекле әңгәмә ҡорҙо, сетерекле һорауҙар буйынса фекер алышты.

Ҡаҙағстандың Ҡарағанды ҡалаһында "Болашаҡ" университетында 22-23 февралдә үткәрелгән "Хәҙерге заманда фән һәм мәғариф" Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында филология фәндәре кандидаты **А.Ф. Үтәйев** ҡатнашты. Конференцияның йыйынтығына тел ғилеменең һәм әҙәбиәттең төрлө проблемалары буйынса беҙҙең факультета эшләүсе 8 ғалимдың мәҡәләһе урын алған.

1 курс студенты Байдәүләтова Ильвира 14 февралдә "Рәсәй саңғысыһы – 2013" республика ярышында ҡатнашып, 3-сө урын яуланы һәм спорт мастеры дәрәжәһенә лайыҡ булды.

Факультеттың бер төркөм студенттары 16 февралдә Өфөлә үткәрелгән Башҡортостандың халыҡ шағиры Ә. Атнабаевтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисәлә булды.

---



Минең исемем – Юто, фамилиям – Һишияма. Миңә 22 йәш. Токио ҡалаһында йәшәйем. Токио сит телдәр университетының төрөксә бүлегендә дүртенсе курста уҡыйым. Ғаиләмдә биш кеше бар. Ата-әсәйем, мин һәм ике һеңлем. Атайым журналист, әсәйем хужабикә, һеңләләрем студент.

Башланғыс мәктәптә уҡыған саҡта сит илдәр менән ҡыҙыҡһына инем. Урта мәктәптә уҡыған саҡта телдәр өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Иң башта төрөк телен уҡый башланым. Юғары мәктәптә уҡыған саҡта төрөк телен өйрәнеү минең яратҡан шөғөлөм булды. Уны яҡшыраҡ белеү өсөн Токио сит телдәр университетының төрөксә бүлегенә индем.

Мин университетта ике йыл төрөк теле өйрәнгәндән һуң, үзбәксә, ҡаҙаҡса, уйғырса дәрестәрҙе лә тыңланым. Әммә уларҙы үҙләштерә алманым. Шул уҡ ваҡытта интернетта татар йырҙарын тыңланым, улар миңә бик оҡшаны. Шуға күрә татар теле менән ҡыҙыҡһынып, уны өйрәнә башланым. Башҡорт теле татар теленә бик оҡшаш икәнен белгәс, уны ла уҡый башланым.

Мин башҡорт телен күберәк интернеттан өйрәнәм. Башҡорт матбуғатын уҡыйым, БСТ каналын ҡарайым, "Юлдаш" һәм "Ашҡаҙар" радиоһында башҡорт йырҙарын яратып тыңлайым. "В контакте" сайтында башҡорттар менән аралашам, скайптан башҡорттар менән һөйләшәм. Башҡорт телен өйрәнеүҙе эш итеп түгел, ә яратҡан бер шөғөл булараҡ ҡабул итәм.

Мин киләсәктә Башҡортостанға барырға теләйем. Иң башта Өфө ҡалаһын, артабан ауылдарҙы, Урал тауҙарын күргем килә. Башҡортостандың тәбиғәте бик матур икәнен беләм. Башҡортостанда башҡорт мәҙәниәте менән танышырға, башҡорттар менән һөйләшергә, дуҫтар табырға ла уйлайым.

Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалында "Дарман" гәзите сығыуын дуҫым Әмирханов Айнурҙан ишеттем һәм, уның һорауы буйынса, ошо мәҡәләмде яҙҙым. Стәрлетамаҡта белем алыусы бөтә студенттарға ла уңыштар теләйем.

# КИЛӘСӘКТЕҢ ҺҮҘЕН ЭҘЛӘЙБЕҘ

Уй!..
Уй!
Ғәжәпләнмәйенсә, уйланмайынса,
Тора алаһыңмы бер көн кеше?!
Ҡуй!
Ана, һүнгән шәмдәй ҡатып ҡалған берәү, һинең
ише.
Үләнме, ташмы?
Артыҡ булған маңлайҙағы өсөнсө ҡашмы?
Уй, уйла...
Уй һин эште батыр булып, аҡыл менән.
Уйылһын уйың.
Ҡуйма, ҡыу!
Ятты ҡыу! Ялғанды ҡыу!
Тормош тиһеңме ҡабаттан күтәрелер быу?!
Быу...
Уйнап һөйлә, уйлап һөйлә,
Уйлап эш ҡыл.
Булмаһын тел уйҙар телер йөрәктәрҙән өҙөлгән ҡыл.
Бәрәкәтең – йәшәү,
Уй-шишмәнән тамсылаған,
Ҡылған эштәреңә ҡарап һин доға ҡыл...

**Розалия Зарипова, 4 курс**

***

Матурлыҡтың бер тамсыһы
Тамды минең устарыма.
Их, йөрәккә һалаһы ла
Юғалтмаҫҡа, юғалтмаҫҡа.

Ҡарашында ине ул моң,
Тынаслығым урланды.
Баҙлап янған мөғжизәнән
Һөйөү уты тоҡанды.

Күҙҙәремә ихлас баҡ та
Һал усынды устарыма.
Йөрәк уты ҡушылғанда
Матурлыҡтың тамсыһына.

Ут менән һыу ҡауышҡанда
Асам һиңә хистәремде.
Бер тамсы матурлыҡ өсөн
Ал һуң, әйҙә, йөрәгемде.



**Тимур Рәхмәтуллин, 2 курс**

***

Серле йондоҙ төнөн йылмайғанда,
Тәү башлап мин унан һораным.
- Әйтсе, йондоҙ, нисек өлгөрәһең,
Күк көмбәҙен етеҙ урайһың?

Һин һүнәһең – кеше теләк теләй,
Бүленәһең меңәр осҡонға…
Йондоҙҡайым, нисек түҙәһеңдер.
Ниңә бошонмайһың һин быға?

- Мин бит – хыял. Хыялдарҙың мәңге
Йәшәгәнен әллә белмәйһең?
Минең һүнеү – ул бит үлеү түгел.
Күңел балҡышында теремен.
Меңәр осҡондарҙа ҡабынам да
Атыламын, теләк теләгәндә.
Минең ғүмер яҡты хыял булып
Балҡый шунан күгең көмбәҙендә.

**Гөлнара Ирназарова, 1 курс**

**Ауылым иртәһе**

Көтөүсенең ҡалын көр тауышы
Яңғырап үтте ауылым өҫтөнән.
Өйҙә ҡалған быҙауын һағынып,
Һыйыр мөңрәй бөтә көсөнә.

Таң килеүе – моң килеүе икән,
Һандуғастар һайрай талпынып.
Ауылҡайым, һинән бойоҡ китәм,
Кире ҡайтам шундай ашҡынып.

Тауҙарыңа менәм, һыуын эсәм,
Йөрәгемдән хистәр урғыла.
Эй, ауылым, һиндә бөтә нәмә,
Йырланмаған моңло йыр ғына.

**Гәбделгәзиз Рәхимов, 1 курс**



Учредитель СФ БашГУ. Издатель СФ БашГУ.
Шеф-редактор Мысляева Н.С.
Редакционная коллегия:
Мазнева Е.В. (редактор), Арсланова В.Х.,
Каратеева Т.Н., кафедра башкирского языка
СФ БашГУ

Адрес издателя, редакции, типографии:
453103, РБ, г.Стерлитамак, пр.Ленина,49
Контактный телефон: 43-14-77
E-mail: 167vestnik@rambler.ru

Приложение к газете "Вестник СФ БашГУ"
Газета распространяется в СФ БашГУ
бесплатно

Заказ №____________ Тираж 300 экз.

Газета отпечатана в типографии СФ БашГУ
Время подписания номера в печать
по графику 17.00, фактически в 17.00

Рукописи и фотографии не возвращаются и не рецензируются. Редакция оставляет за собой право редактировать тексты читателей, не изменяя их содержания.
Мнение авторов публикуемых материалов не всегда совпадает с мнением редакции